*Рафаэль АҘНАҒОЛОВ,*
*педагогия фәндәре докторы*

# ШИҒРИӘТ ТӨҪӨ — ХАЛЫҠ ЯҘМЫШЫ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим үҙенең бер интервьюһында "шиғриәт яҡты булырға тейеш" тигәйне. Халҡыңдың үткәне, йәшәйеше, киләсәге яҡтымы? Шағир фани донъяла күпте кисергән халҡының йөрәге, бер моңло киҫәге икән, ул инде ялған йыр йырлай алмай. Йырлаған көндә лә, яҡты тормош, азатлыҡ өсөн ҡорбан булған ҡаһарман батырҙарының рухы рәнйер ине, минеңсә. Замандың низам-тәртиптәренә яраҡлаштырылған шиғыр халыҡсанлыҡҡа дәғүә итә алмайҙыр. Нотаға һалған йырҙың да бит күбеһе күңелгә үтеп инә алмай. Традиция халыҡтың сал тарихынан һут ала. Тарихыбыҙ шанлы, әммә ул ҡанлы. Халыҡ юҡҡа:

Ай Уралым, һинән ҡырҡып алһам,
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары,

тип йырламаған бит.

Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары... Шағирә Тамара Ғәниева килер быуындарҙың яҙмышы өсөн йыш һыҙлана.

Аяныслы мираҫ беҙҙән ҡала,
Ситлек кеүек наҡыҫ был донъяға
Аяҡ баҫыр яңы быуынға, —

тип яҙа ул бер әҫәрендә.

Яңы быуындың да тормошо гөл-баҡса булмаясаҡ. Быуындар шәжәрәһен яңыртып яҙып булмағандай, халҡыңдың үткәнен дә яҡты ноталарҙа ғына йырлап булмаясаҡ. Героик үткәндең әсе еле күҙҙе ҡырҡа.

Шиғриәт төҫө — халыҡ яҙмышы, уның бөгөнгө булмышы. Мәҫәлән, бына ул бөгөнгө шиғриәт төҫөн асҡан шиғри юлдар:

Ижад тигән мөғжизәнең
Серен аса докладтар.
Бер яҡта бахыр талантлар,

Бер яҡта — лауреаттар.
Болоттар ҙа ситләп үтә
Офоҡтар юсығынан.
Инде айырмаһын яҙмыш
Ағайҙар ышығынан.

Бында ниндәй кинәйә ята икән? Ағайҙар ышығы ярай ҙа тел-тештән, яман һүҙҙән, яман күҙҙән һаҡлаһа! Әммә тормошта киреһенсә килеп сыҡҡан осраҡтар тулып ята.

Бөгөнгө поэзияла төшөнсәләрҙең дә мәғәнәләре алмашына. Бөгөнгө быуын йырын киләсәк шағир-шағирәләр аңлармы икән? Шиғриәттә төрлө юлдар бар, уларҙы ла төрлөсә таныуҙар бар. Фәндә лә бит фәнде фән иткән ғалимдар бар, фәнде кәсеп иткән әһелдәр бар. Шиғриәтте үҙ яҙмышы тип ҡабул иткән Тамара Ғәниева өсөн ил, халыҡ яҙмышы тураһында хәстәрлек һәр саҡ выждан бурысы булып ҡаласаҡ. Түбәндәге шиғри юлдар ана шуға ишара:

Төйәгем, тип мин сәждәгә китәм,
Нығытмалар ятһын һөйәктән.
Мин үлгәндән халҡым йырһыҙ булмаç,
Моңдо уға яҙмыш өйрәткән.

## Халыҡсанлыҡҡа юл

Художестволы әҙәбиәткә әҙәби-теоретик төшөнсәләр аша анализ биреү яҙыусы донъяһын тулыһынса аса алмаясаҡ. Тамара Ғәниева шиғриәте — үҙе бер ҡабатланмаç үҙенсәлекле донъя. Ана шул мөғжизәләр илен беҙ уның "Ҡыпсаҡтар" тип исемләнгән поэма-эпитафияһынан күрәбеҙ.

"Ҡыпсаҡтар" әçәренең жанрын шағирә поэма-эпитафия тип билдәләй икән, бында ла ул иғтибарҙы халҡыбыҙҙың бик тә боронғолоғона йүнәлтә. Әçәрҙең тарихи ерлеге — халыҡсанлыҡтың нигеҙелер. Поэманың ҡоролошо ла үҙенсәлекле. Этнокультураның бер биҙәге булған мифологик алымға таяна автор үҙ ижадында. Лирик геройҙың төшөндә йәне (рухы), тәненән айырылып, бейек-бейеккә, күк киңлектәренә үрләй. Шул рух күктән ерҙәге үҙ иленең боронғо бер мәлен, халҡы ғүмеренең бер ярсығын күрә. Ҡыпсаҡтар тарихының бер миҙгелен һүрәтләй шағирә. Ул миҙгелдә тотош бер халыҡтың яҙмышы ята. Ил инәһе Әфаҡ әйтмешләй:

Бик ризамын, сиге, кәртәһе юҡ,
Ҡалҡаны ныҡ ҡыпсаҡ еренең.
Баш биреүҙәр, бил бөгөүҙәр ситен,
Сабаталы кафыр түгелбеҙ.
Ер-инәнән, Ҡояш, тәңреләрҙән
Яралмыштыр яҡты көнөбөҙ.

Артабан ырыуҙың инә бөркөтөләй Әфаҡ үҙ халҡының йәшәү рәүешен тасуирлай. Ул әйткәнсә, ырыу ишәйә, ҙурая бара. Яңы үрсемдәр ергә килеп тора. Шуларҙың байтағы инә ҡарынынан эйәр өçтөндә ярала. Тимәк, халыҡ, үҙ бәхетен, азатлығын даулап, күпселек ваҡытын эйәр өçтөндә уҙғара, ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙ ҙа. Ырыуҙың йәшәү ҡағиҙәһе шундай:

Хәнйәр менән һаҙаҡ тотмаҫ бала,
Талпан бит ул ырыу иңендә.
Яу сапмаған ҡыпсаҡ — ҡыпсаҡ түгел,
Мал тапмаған — хаҡлы үлемгә.

Төшөндә тәненән айырылған йәне (лирик геройҙың рухы) күктән сал тарих төпкөлөндәге Әфаҡтың әйткәнен дә күҙәтә, ишетә. Бик тә абруйлы, дала, ырыу ҡаршыһында бик тә оло вазифаға ирешкән, ҡыпсаҡ иленең инәһе дәрәжәһенә күтәрелгән Әфаҡ Тораташ тауы менән һөйләшә. Вазифаһы оло булһа ла, Тораташ алдында ул ”ком бөртөгө, күктең, Ҡояштың ҡоло”. Ил инәһе Тораташтан иленә, ырыуына ҡот һорай:

Күҙҙәремә, йәндәремә
Саялыҡ бирсе, һынташ.
Кешелек түле ырыуым,
Хаялыҡ бир, Тораташ.
Ултырам аяҡ осоңда,
Халҡыма дарман иңдер.
Ил инәһе итте яҙмыш,
Рух ныҡлыҡтары күндер.

...Тораташтың арҡаһына ҡояш нурҙары яғылды. Ҡыпсаҡ ерենең иңрәүүкһеүҙәре, моңо булған, ете йылға бер илаған Тораташ илай. Ниңә илай ул? Әфаҡтың ҡот һорап ялбарыуына, көсһөҙ булғаны өсөн илаймы? Ер менән Күкте — Ата менән Ананы, шул ике бөйөк аралыҡты тоташтырып тороусы, ике арала бәйләнеш сараһын үтәүсе көмөш һабантурғайҙарҙың (мәжүсиҙәрҙең хәбәрләшеү сараһы, хәреф-өндәр, һүҙҙәр тамғаһы) Һомай ҡошҡа барып етмәүенән илаймы Тораташ? Һомай — Инә Тәңре. Уның ҡанаттарынан төшкән күләгәне мәжүсиҙәр күк тәңреләре фатихаһы тип һанаған. Тимәк, ил инәһе Әфаҡтың сәләмдәре — көмөш һабантурғайҙар Һомай әсәне таба алмай. Яуға-дауға күтәрелгән ҡыпсаҡтарға ҡаза килеренә ишара был. Әфаҡтың күңелен талаған хәүеф тә оҙаҡ көттөрмәй. Ул-баһадирҙар, ҡыҙ-батырҙар яуҙан ҡайта, әммә улар араһында Ҡоншаҡ хандың мырҙаһы Аҡман — Алмаһылыуҙың ире юҡ. Аҡман батыр ҡыпсаҡ иленең даны булған. Алмаһылыуға уның бары тик улына ҡалған аманатын — таралғылы ҡайышын, уҡ-һаҙағын тапшыралар. Илау, күҙ йәше — батыр һәм, ғөмүмән, үлгән кешенең рухын рәнйетеү икәнен аңлаһа ла, Алмаһылыу үкһеп уланының итәгенә ауа. Аҡ тирмәгә Әфаҡ килеп инә һәм киленде йыуатмай, уға артабанғы бурысын төшөндөрә:

Һин беләһең, Алмаһылыу килен,
Сабыр була ҡыпсаҡ бисәһе.
Илгә ирҙәр тыуҙыраһы бурыс
Китмәй һинән, ырыу әсәһе.
Уланың бар, ана, ир етмәгән,
Һәр бер бала — илгә таяныс.
Ерҙә золом, хәүеф тулағанда,
Йөрәгең ҡын хәҙер,
Ул — ҡылыс.

Илде ишәйтер, ырыуҙың көсөн арттырыр өсөн ҡатын-ҡыҙҙар батыр, ҡурҡыу белмәç улдар тыуҙырырға бурыслы. Ил инәһе — Әфаҡ Аҡман батырҙың улына ла атай-әсәйҙең ҡеүәт-көҙрәтен тәнгә, йәнгә, елек эстәренә һеңдерергә ҡуша: ”Инәң үлһә — һинең йылғаң ҡорор, атаң үлһә — тауың ишелер”, — ти ул. Атай изгелеген ҡояш нуры менән сағыштыра. Әсәйеңдең бауырына терәлеп, ил алдындағы бурысын үтәргә ҡуша.

Поэманың ”Ҡыпсаҡтарҙың мәйет оҙатҡаны” тигән бүлегендә автор Аҡман батырҙы ерләү хәстәрен һүрәтләй. Бында боронғо йола бик тә иғтибарға лайыҡлы. Аҡман батырға, һуңғы ҡәҙер-хөрмәт итеп, кәç-тупрактан ҡорған ҡороп ҡуялар. Ҡорғанға атын, уҡ-һаҙағын, көмөш күлдәген, ҡашыҡ-аяҡ менән көмөш тәңкәләрҙе лә күмәләр. Көмөш тәңкәләр мәрхүмдең гүрен яҡтыртыр. Ат, уҡ-һаҙаҡ, көмөш күлдәк — яуҙарға сапҡан батырҙың ерҙәге йәшәү рәүешенең биҙәктәре. Ҡоншаҡ хандың кесе мырҙаһын — Аҡманды барлыҡ ҡыпсаҡ халҡы бик ололап, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, мәңгелек йортона оҙата.

Аҡман батыр гүр эйәһе булды тип, илдә тормош туҡталмай. Ил күңеле, ил күҙе — тормош хәстәре.

Күктәге рухҡа ерҙә кем ни ҡылғаны барыһы ла күренә. Ул Алмаһылыуҙың — Аҡман батырҙан тол ҡалған ҡатындың сеңләүенә лә шаһит. Был сеңләү поэмала айырым бер моң булып яңғырай. Әçәргә күҙ һалайыҡ:

— Һағышымдан һуҡмаҡ һалам
Һөйәгең ятҡан ергә.
Ҡәбереңдә үкһегәнем
Ишетелерме гүрҙә?
Яҡты күҙҙәрең йомолғас,
Донъям ҡарайҙы минең.
Тол бисәңдең сеңләүенән
Тертлә лә, тимен, терел.

Артабан тол ҡатын ошо сеңләү-һамаҡлауында ҡыпсаҡ донъяһының тотош йола-ғәҙәте, көнкүреш рәүешен һүрәтләй ҙә сыға. Авторҙың ил-йорт йолаларын ни рәүешле тәрән белеүе ошонан уҡ күренеп тора. Сеңләүенең аҙағы ғына ҡапыл һағайтып ҡуя.

Даланың ырыçы китһен,
Тамыр ҡороһон әйҙә.
Ҡыпсаҡты бүтән үрсетмә! —
Ялбарам тәңреләргә.

Хәсрәттән шаңҡыған ҡатын ни әйтмәç. Ошолай сеңләтеп тора ла автор лирик геройҙы, көтөлмәгән көсөргәнеш менән Тәңренән һүҙ әйттерә:

Күктәр әйтте,
Күктәр бойорҙолар:
— Бар булығыҙ ерҙә, ҡыпсаҡтар!
...............................
Бар булығыҙ, мәңге бар булығыҙ,
Ошондайын һеҙгә бойороҡ.

...Һомайғоштоң йәйғор ҡаурыйҙары
Болоттарҙа ятты ҡойолоп.

Поэманы, минеңсә, ошо фекер өсөн генә лә яҙырға мөмкиндер ул хатта.

Ҡорбандарҙың ҡырҡы үтеүгә ҡыпсаҡтар бәйге ҡора. Тирә-яҡтан ир-егеттәрҙең сая аҫылы йыйыла был бәйгегә. Бындай тантанала ҡыҙ күҙләй торған йола ла бар. Ана шул күҙҙәрҙән мәхрүм булмаһын тип, тол ҡатындар өсөн дә айырым аҡ тирмәләр ҡоролған икән. Ил инәһе Әфаҡ Алмаһылыу килененә ни ти шул саҡ? Батырҙарҙың ҡулын сайҙырған саҡта күңелең ятырҙай ир тәңгәлендә туҡталыбыраҡ тор, күҙенә һынап баҡ, ҡыпсаҡтарҙың ҡанын яңыртырҙай аҫыл тоҡом һайла. Әлбиттә, Алмаһылыу ҡыпсаҡтар иленең әсәһе булған Әфаҡтың һүҙенә ҡолаҡ һала. Уның аҡ тирмәһенә лә ҡот ҡуна, тол килен батыр менән ҡауыша. Шулай итеп, ырыу көсөн ишәйтер сараһы күрелә. Әммә баҫҡынсылар ҙа сит ырыуҙы, сит халыҡты үҙҙәренә буйһондороу ҡомары менән яна. Ҡыпсаҡтар тағы ла яуға күтәрелә. Был ғәрәсәт ҡыпсаҡтарҙың, ҙур ҡорбандар килтереп, ҡанһырап, көнсығышҡа сигенеүҙәре менән тамамлана. Алмаһылыу ҙа шул алышта шәһит була. Ете меңләп ҡыпсаҡ әсирлеккә алына.

Шулай итеп, поэмала ҡыпсаҡтар дәүеренең, донъяһының, тарихының бер мәле һүрәтләнә. Әҫәрҙең һуңында лирик геройҙың йәне үҙ тәненә кире ҡайта, ул һыҙлана-һаташа аңына килә. Ергә ҡайтһын өсөн иңенә Һомайғоштоң күләгәһе яткан. Әсә ҡарынын түл ҡыҫтауға ишара был. Әҙәми зат тәненә ташлап киткән йәне, рухы ҡабат ҡайта икән, тормош, йәшәү, тыуым дауам итә тигән һүҙ. Поэмаға һалынған төп мәғәнә лә, бәлки, ана шулдыр.

Тамара Ғәниеваның башҡа поэмалары ла (”Арҡайым”, ”Күкрәгемдә — балам”, ”Йәшел тирәк”, ”Ҡанундар”, ”Йыһан”) иле, халҡы, башҡорттоң тарихи үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында етди уйланыуҙарға ҡоролған. Ҡан-ҡәрҙәштәрҙең рухи асылына оран булып яңғырай шағирәнең һәр эпик әҫәре.

## Ябай һүҙҙән тәрән образлылыҡҡа

Тамара Ғәниеваның тәүге китабы ”Осрашырбыҙ әле” тип атала, ул 1980 йылда донъя күрә. Буласаҡ ҙур һүҙ оҫтаһының тәүге шиғырҙары ябай, инаныстары бер ҡатлы һәм саф. Шағирә тормоштоң ябай ғына ғәҙәти биҙәктәренән дә ҡыуаныс, алтын тапҡандай шатлана:

Ут янында әсәй ҡоймаҡ ҡоя...
Икмәк еҫе өйгә таралған.
Боҫтар бөркә көмөш самауыры,
Ҡояш тора көлөп табанан.
Яңы бойҙай тейәп атай ҡайтҡан,
Көлөп йөрөй ҡалай ҡыуанып.
Икмәк еҫе, атай ҡыуанысы —
Шул түгелме көҙҙөң буяуы?

Әммә ошо осор ижадында уҡ шағирә үҙенсәлекле образдар, художестволы фекер менән эш итә:

Әлегә шул ҡанат нығынмаған —
Аҫыл йырҙар үрҙә — үрҙәрәк!

Кешене өмөт йәшәтә, үрҙәргә, бейеклектәргә күтәрә. Өмөт ул — маҡсат, хыял, киләсәгеңдә бәхетле күрәсәк. Шул саҡтан уҡ автор аҫыл йырҙар йырларға өмөт итә. Кеше күңелен тетрәтер хис-тойғолар әле алда буласаҡ тип, өмөтләнеп йәшәй, тынғыһыҙ ижад утында яна.

Шиғриәт ул — образлылыҡтан, образлы фекерҙән тыуылған, ритмик ҡанундарға буйһонған жанр. Нимә һуң ул образлылыҡ? Образлылыҡ ул — һүҙҙең көсө, һүҙ ҡеүәһе, күркәм телмәр. Икенсе төрлө әйткәндә, образлылыҡ — телмәр поэтикаһы, йәғни телмәрҙең йәнлелеге, матурлығы. Образлылыҡ уҡыусыны фантазияға әйҙәүсе, абстракт фекергә өйрәтеүсе, туған тел мөмкинлектәренә һоҡланыу уятыусы төп шиғри сара. Әгәр шул йәнлелек, күркәмлек булмаһа, әҫәр һүҙ бутҡаһына әйләнер ине. Тамара Ғәниеваға ана шул һүҙ көсөн, һүҙ ҡеүәһен, телмәр сараларының мәғәнәүи нескәлектәрен тойоу һәләте хас. Һүҙҙең мәғәнәүи мөмкинлектәрен хис-тойғолар ағышына көйләй белеү ҡөҙрәтенә эйә ул. Тәүге китабының исемен дә юҡҡа ғына "Осрашырбыҙ әле" тип атамағандыр.

Кеше үҫә-үҫә үҙгәрә, зауығы, аҡылы ла формалаша бара. Алдараҡ беҙ шағирәнең "Ҡыпсаҡтар" поэмаһындағы етди һәм эпик фекерләү, ил, халыҡ яҙмышы хаҡындағы уй-кисерештәр менән осрашҡайныҡ. Ә "Ҡыпсаҡтар"ға тиклемге юлда ул лирика серҙәрен үҙләштерә-үҙләштерә бара:

Салауатым!
Һинән киткән саҡта,
Иламамын тинем,
Иланым.
Йәшлегемдең йәшел толомдары
Урамыңда ҡалды уралып.
...................................
Салауатым!
Һау бул, һау бул инде,
Иламамын тиһәм,
Иланым.
Аҡ бәхеттәр һөҙгән урамдарың
Йөрәгемә китә уралып.

Йәнә лә сағыштырығыҙ:

Күргәнем юҡ,
Ғәжәп илдәр бар, ти...
Мин торам да бында юл борам.
Ҡитғаларға алыштырмаҫ дәүләт —
Етмеш ете өйлө бер урам.

Был өҙөктә "йәшел толомдар" — ғүмеркәйҙәрҙең бер мәле, "аҡ бәхеттәр һөҙгән" тигәнде рухи яҡтан сынығыу алған тип юрау кәрәктер.

Икенсеһендә инде тыуған ауылының үҙәктәргә үтер яҡынлығын, хис-тойғоларын сафландырыр бала саҡ илен данлай автор. Рухы ла, шағирлыҡ оҫталығы ла шымара.

## Етегән дә тигән ете йондоҙ...

Башҡорт шиғриәтендә Тамара Ғәниеваны кем менәндер бутау ҡыйын, үҙ тауышы, үҙ табыштары бар. Нәфис һүҙ ҡаҙнаһына ул ете йыйынтыҡ бүләк иткән. Ете китапты мин Етегән йондоҙға оҡшаттым. Етегән ете яҡты йондоҙҙан тора. Шағирәнең дә "етегәне", ете төҫтәге хис-тойғолар балҡышы, образлы һүҙ, фекер ҡөҙрәте, рух сығанағы булып, уҡыусылар күңеленә, шиғриәт һөйөүселәр зиһененә хеҙмәт итә. Бына ул йондоҙҙарҙың исемдәре: "Осрашырбыҙ әле" (1980), "Кейек ҡаҙҙар" (1984), "Көмөш ысыҡ" (1988), "Уйлы сағым" (1991), "Ҡыпсаҡтар" (1994), "Арҡайым" (1997), "Аҡыҡ көмбәҙҙәр" (2001). Ана шулар эсендә алты поэмаһы — заман эпостары урын алған.

Ете китаплы шағирә бәхетлеме? Әлбиттә, әҙәми затҡа хас булған бәхеттәр уны ла ситләп үтмәгән. Бәхеттәр тигәндең дә үтә ябайҙары ғына, яҡты көнө, тыныс үткән төнө менән шөкөр итеүселәргә хастары ғына шағирәнең өлөшөнә төшкән. Бына уның үҙенсә бәхет тип кинәнес тапҡан мәлдәре:

Юҡ, бәхеттәр мине ситләмәне,
Булды һөйөү, яныу, көйөүҙәр.
Булды арыҫландай ир-егеттең
Берҙән-бере булып йөрөүҙәр.
Булды иҫереп гөлдәр хуш еҫенән,
Яҡындарға таждар үреүҙәр.
Йырҙар, моңдар, хистәр даръяһында
Ҡоластарҙы ташлап йөҙөүҙәр.
Иң яҡыны: күҙ йәштәре аша
Әсәй булып ҡыуанып көлөүҙәр.
Изгеләрҙән-изге сабый йәнде
Ап-аҡ биләүҙәргә төрөүҙәр.

Бәхетте ана шулай ябай ғына аңлатһа ла, шағирәнең ижадындағы зауыҡ, ҡыҙыҡһыныу даирәһе — даръя.

Мин шағирәнең әҫәренән этнокультура биҙәк-нағыштарын эҙләйем. Үҙ этнокультураһына иғтибар биргән яҙыусылар минең күҙ алдымда, айлап түгел, көнләп үҫә башлай. Милли этнокультура һүҙ оҫтаһының әҫәрҙәренә, дөйөм ижадына поэтик балҡыш, моң бирә. Юғиһә, күп шиғырҙарҙа ритмик ҡалыпҡа һалынған һүҙ бутҡаһы, ярым-йорто зәғиф дидактика урын ала. Әгәр ана шул һүҙ талҡышына этнокультура, мифология биҙәктәрен ҡыҫтырып ебәрһәләр, яңы образлы һүҙ, фекер моронлар ине. Ә бына Тамара Ғәниеваның шиғриәтендә халыҡ мәҙәниәте һулышын тойорҙай әҫәрҙәр күп, тәүге китаптан уҡ күренә был: "Бирнә", "Дебет iлəй ҡыҙҙар", "Туй күлдәге", "Торналар" һәм башҡалар.

”Осрашырбыҙ әле” тип аталған шиғырҙар йыйынтығы — шағирәнең тәүге китабы. Ихлас бер ҡатлылығы менән күңелде арбай.

Бала сағым —
Ялбыр сәсле ҡыҙый,
Абындым, тип үкһеп илама!
Һинең ише генә сабыйҙарҙы
Илатмаған фани донъялар.
Быуын ҡатты, дәрт бар йөрәгемдә —
Бар йөктәргә төптән егеләм.
Инде хәҙер кемде кем еңер тип,
Һынап бағам донъя күҙенә.

## Кейек ҡаҙҙар сыңы

Шағирәнең йәшәүе — һәр шиғырында баҙлап янған образлы һүҙҙә, фекер тәрәнлегендә. Халыҡҡа әйтер һүҙең булырға мөмкин. Әммә ул һүҙҙе күңелгә ятышлы итеп яңғырата алыу һәләте лә булырға тейеш-тер. Таланттың талымһыҙ ҡанаты — һәләт. Ҡанат осҡанда нығый, тиҙәр. Ә һәләт ҡайһы арауыҡта талант кимәленә күтәрелә ала икән? Һәләт тә ана шул кеше күңелендәге ҡанат түгелме? Тамараның һәләте кейек ҡаҙҙарҙың ҡанат ҡағышын тоя белеүҙәлер, минеңсә. Ҡаҙҙарҙың ҡайтыу-китеү арауығын шағирә ғүмер үтеүе менән тиңләй. Һәр ғүмер миҙгеле ҡаҙҙар осоуынан үҙенсә моң алған, моң сығарған, сылбыр-сылбыр сыңлап быуындар алмашынған. Һәр быуын, осҡан ҡаҙҙарға ҡарап, һағышын, ҡайғыһын таратҡан.

Тоташа алмай ҡалды ҡулдарыбыҙ,
Аймылышты ҡайҙа юлдарыбыҙ?
Ҡушылдыңмы әллә һин ҡаҙҙарға?
Һин ҡайҙарҙа?
Мин һуң...
Мин
Ҡайҙарҙа?

Ана шул осоштоң моңон, мәғәнәһен, асылын Тамара Ғәниева кеүек асыр өсөн, ғәҙәти һүҙҙәр менән, шиғри тел менән әйтер өсөн күңел көсөң дә булырға тейештер ул! Кейек ҡаҙҙар оса... Шул осош та һәр әҙәмгә ҡанат бирә. Тимәк, әйҙә, һин дә ос, үрлә, донъя тар түгел, тимәкселер шағирә. Шулайҙыр.

Айырым-айырым йөрөр юлдар күп ул,
Бергә йөрөр юлдар булманы...
Беҙ икебеҙ ике ярымшарҙар.
Ҡоршай бары ҡаҙҙар сылбыры.

Яҙмыштарҙың, эйе, аҙашып ҡалғандары ла була. Ҡоршауҙар бер үк сылбырҙа булһа ла, һәр ҡоршау аралығында ваҡыт, йылдар, ғүмер ята. Һәр кем үҙ ишен ғүмер буйы эҙләй. Шул эҙләү, ынтылыш, көс, ”үҙ яртымды табасаҡмын!” тигән өмөт булмаһа, ерҙә йәшәүҙең, ғүмер тигән төшөнсәнең мәғәнәһе лә юҡҡа сығыр ине. Әммә ғүмер үкенес-

һеҙ, һыҙланыуһыҙ ҙа булмай шул. Күңелдәргә тынғыһыҙлыҡ өҫтәп, көҙөн-яҙын ҡабат-ҡабат ҡыр ҡаҙҙары осмаһа, хәтер яланына кемгәлер һағыш, кемеһенәлер ҡайғы, кемдәргәлер өмөт бирерҙәй ҡаурыйҙарын ҡалдырмаһа, тормош, яҙмыш төшөнсәләре лә сайралыр ине, күрәһең. Тимәк, хыялдағы ҡоштар — тормоштоң үҙе, яҙмыштың күҙе. Шағирә лә ана шул йәшәү диалектикаһын раҫлай һымаҡ:

Нисә йылдар, нисә быуат шулай,
Ҡайҙан килеп, ҡайҙа китәләр?
Сылбыр-сылбыр сыңлап күк иңендә
Ғүмеркәйҙәр икән үтәләр,
Ғүмеркәйҙәр икән үтәләр.

Эй, яҙмыш! Ҡанбабалар, сәсән-яугирҙәр, ырыу батырҙарының аманаты ҡатын-ҡыҙ затына, ”ир-ҡыҙҙар” затына ҡала бара түгелме?

Тамара Ғәниеваның шиғриәте образлы һүҙҙән тамырланған тиһәм, шағирә ижадын бөтә тулылығында, камиллығында күреп еткермәү булыр ине. Образлы һүҙ, төрлө сағыштырыуҙарҙан тыш шиғри телмәр булмайҙыр ҙа. Матур һүҙҙәр менән аҡыл һатыу, вәғәз һөйләү, мәғәнәһеҙ үткәргән үҙ тормошоңа күҙ йомоп, кемделер йәшәргә өйрәтеү, образлы һүҙгә ышыҡланып, ”аҡыллы баш” булып күренергә самалау, бейеклектең асылын, аңын-тоңон белмәйенсә, бөйөктәрсә фекер йөрөтөү, буш дидактика һымаҡ күренештәр беҙҙең шиғриәт майҙанында йыш осрай. Шиғриәт ул ундай мәзиндәр мөнбәре түгел. Шиғриәт ул — күркәм, изге күңелдән ташып сыҡҡан, йөрәкте ярып сыҡҡан нәфис һүҙ, фәһемле телмәр поэтикаһы. Шиғриәт ул — ижадта һәм тормошта яныу, ярһыу. Ана шул илаһи эшмәкәрлек, талант кимәленә күтәрелеп, башҡорт шиғриәтенә Тамара Ғәниева тигән йондоҙҙо бүләк иткән. Шул йондоҙҙоң мәғәнәле балҡышынан шиғриәтебеҙҙең бәҫе күтәрелә, мәртәбәһе үҫә.

”Кейек ҡаҙҙар” иһә Тамараның шиғриәттә йәшәүгә, көслө күкрәүгә әҙерлеген һынап ҡарау йыры, моңо булғандыр, минеңсә.

## Көмөш ысыҡ төшкән таңдар

Шағирәнең ”Көмөш ысыҡ” (1988) йыйынтығы бары тик мөхәббәткә арналған. Әммә ул хис-тойғо ташҡыны ҡырҡ төрлө сүрәткә ингән. Уның бер тулҡыны туған тел, моң, ғәзиз еребеҙгә арналһа, башҡа тулҡын-ялҡындары һөйөүҙән көйөү, һөйөүҙән шашыу, ярһып ташыу, серле хыял-уйҙар, һөйөү йәйғорҙарына арналған. Кешене был фани, ауыр тормошта һөйөү йәшәтәләр, һөйөү йәшнәтәләр. Әгәр шулай булмаһа, шағирә ”Ҡайырып-ҡайырып сабыр бесән өҫтө — бәпес кенә көткән мәлем төҫлө”, йәки ”Өмөттәргә тулы донъя үҙе йөккә уҙған ҡатын һынында” тип яҙмаҫ та ине. Мөхәббәттең барлыҡ гүзәллеге бәпес көткән мәл, ғүмер тигән төшөнсәнең ҡабатланмаҫ тантаналы бер мәле. Йәшәү рәүешебеҙ әллә үҙгәрәме? Ҡайҙа тороп ҡалды ”Таһир менән Зөһрә”, ”Хәлил менән Ғәлиәбаныу” тип телдәребеҙ талған саҡ, йәндәребеҙ шуларҙың һөйөү ялҡындарынан янған саҡ? Әллә заман тормош ыҙанын үҙгәртәме, әллә үҙебеҙ заманды яҙлыҡтырҙыҡмы? ”Ауыҙ тултырып ”атай”

һүҙен әйтмәй, үҫеп килә ата балаһы" тип әсенмәҫ ине шағирә. Ошо һыҙланыу Тамара Ғәниеваның бүтән шиғырҙарында ла сағылып ҡала.

Тимәк, ғүмер миҙгелдәре уға яра һалырға ла өлгөргән. Яҡты мөхәббәттән ойҡашҡан ғаиләлә тынғылыҡ юҡ. Емерелеп, ҡыйралып бара ул. Төрлөсә ҡормаҡсы уны лирик герой. Бала хаҡына әллә ниндәй сүрәттәргә кермәксе... Ә тормош һин тигәнсә бармай. Яралар яңыра, яңылары өҫтәлә. Хатта гармундың гармуны ла бойоҡ, өй ҡыйығында ята. Гармун тигәс, тағы ла бер һорау миңә тынғы бирмәй. Моң, йәшәү моңо юғала бара төҫлө. Һуғышҡа тиклемге һәм унан һуңғы замандың дәртле ялҡындары ҡайҙа тороп ҡалды икән? Ауыр яҙмыштан бөкөрәйер хәлгә еткәндең билен яҙҙырған, фронттарҙан алған ҡара ҡағыҙҙай ҡара янған тол ҡатындар йөҙөн айҙай балҡытҡан, таяҡҡа таянғандарҙы таяҡ-аяғын онотторол бейергә төшөргән гармундары ҡайҙа һуң? Күрәһең, ошо һорау шағирәне лә борсой:

Үтәнеңме инде бурысыңды,
Күрке булдың нисә табындың?
Төймәләре бөтөн,
Үҙе туҙған,
Үҙе туҙған баян-гармундың.
Һиндәйҙәргә өйҙөң ҡыйығында
Беләм дә бит рәхәт түгелен,
Төймәләргә баҫһам, өн сығармай,
Йыр сығармай хәҙер күрегең.

Ул йылдарҙың гармундары, күңелдәрҙе һиҫкәндергән зар-моңдары хәтерҙәрҙе һаман тетрәндерә. Әммә ана шундай яра-тетрәнеүҙәрҙән кем азат был донъяла. Шағирә иһә күңел ҡыйралышын ауыр кисереүсән ҡатын-ҡыҙ образын тыуҙыра бит ижадында.

Моңдашы булмаған шиғыр — ғүмерһеҙ. Уҡыусы күңелендә шиғырҙағыса йәки шуға яҡыныраҡ хис-тойғо, моң тыуҙырмай икән, ул инде моңдашлыҡҡа, халыҡсанлыҡҡа дәғүә итә алмай. Йыр ҙа иҫкерә, халыҡ күңелендә элеккесә, тәүге мәленсә, шул заманса ҡабат балҡый алмай. Үткән заманға ауаздаш шиғырҙар Тамара Ғәниеваның шиғриәтендә лә бар. Был тәбиғи. Һүҙ сәнғәтенең һәр жанры замансылыҡҡа ла буйһона. Шулай ҙа хис-тойғо заман ҡыҫандарына ҡарап үҙгәрмәгән кеүек, ваҡыт сиктәрен аша атлап, әленән-әле үҙенә моңдаш шиғырҙар ҙа бар бит әле. Бына, мәҫәлән, Тамараның "Ҡош баҙары" тигән шиғыры бынан сирек быуат элек яҙылһа ла, бөгөнгөләй моң, мәғәнә менән яңғырай. Халҡыбыҙ тарихындағы, йәшәү рәүешендәге сит сәйәсәттең ҡара шәүләһе, ҡара һулышы күңелдәрҙә өйөрмәләр тыуҙыра, хәтер төпкөлөндә иһә янартауға бәрәбәр хистәрҙе уята һымаҡ. Тәү ҡарашҡа ҡош баҙары — мөғжизәләр иле:

Ҡала уртаһында ҡош баҙары,
Эй һайраша моңло ҡошсоҡтар.
"Сут-сут" тигән һайын, күңелдәргә
Һибелеп төшә көмөш ысыҡтар.

Ысынында иһә, тотҡон ҡош зары — яҙмышыбыҙ ярсығы. "Ғилмияза", "Таштуғай" кеүек йырҙарыбыҙ ҙа бит тотҡон ҡатын-ҡыҙ зары түгелме ни? Шиғырҙың лирик геройы, ҡош баҙарына килеп юлыҡҡас, хатта бер ни тиклем көнләшеп тә тамаша ҡыла. Наҡаҫ туғайҙары көнләшерлек моңло байрамға һоҡланыу тойғоһо бер аҙҙан йән ғазабына әйләнә. Лирик геройҙағы тәүге күкрәү тетрәүгә күсә. Хәтер түрендә зилзилә ҡуба: ситлек ситтәренә бәреләһуғыла һайраған ҡошсоҡтар һары былбылдар ҙа баһа! Лирик герой тәрән уй ҡойонона сума:

Түләп осорор инем берегеҙҙе,
Ҡалғандарҙы кемдәр ҡотҡарһын?
Адрес бирер инем:
Тыуған яғым —
Аҡ ояһы ҡоштар-дуҫтарҙың.
Ҡала уртаһында — ҡош баҙары.
Эй һайраша әсир ҡошсоҡтар.
"Сут-сут" тигән һайын, күңелдәргә
Тирелеп кенә төшә һағыштар.

Тирелеп төшкән һағыш нимә тураһында? Азатлыҡ хаҡында, әлбиттә. Ситлектәге ҡош, ирекһеҙ ил. Тамара Ғәниева ана шундай кинәйә аша милләтебеҙҙең бойондороҡһоҙлоғон тасуир итә түгелме ни? Ҡаһарман халҡыбыҙ, моң сәсер телебеҙ азатлығы өсөн күтәрелгән ихтилалдар баҫтырылып, батырҙарыбыҙ киҫелгәс, аҫылғас, зиндандарға ябылғас, Рәсәй батшалығын тетрәнергә мәжбүр итеүсе илаһи зат-зәүеребеҙҙе ҡотҡарырға тип, беҙҙе яҡлап, донъя ниңә яуға күтәрелмәгән? "Ҡош баҙары" әҫәрендәге лирик геройҙың тирелеп тә төшкән һағышы, бәлки, ана шул хаҡталыр? Донъя баҙарында беҙ ҙә, бәлки, моңдарыбыҙ менән тирә-йүнде, илде, донъяны таң ҡалдырыр халыҡ булһаҡ та, туған телебеҙ, хыялдарыбыҙ көндән-көн ниндәйҙер бер сиккә, ситлеккә инә бара түгелме һуң? Нисек кенә булмаһын, "Ҡош баҙары" шиғыры — тәрән мәғәнәле, уйлы, хисле әҫәр. Ул Тамара Ғәниева шиғриәтенең ҡуҙы. Шағирәнең һәр китабы, һәр шиғыры — халҡыбыҙ яҙмышының асылына үтеп инеү. Образлы һүҙ, уйлы мәғәнә, ғәҙәти булмаған фекер көсө уның поэтикаһына хас саралар.

Ғүмер уҙа, хыялдар ҙа үкендереп туҙа икән. Тарихи яуҙарҙан, азатлығыбыҙ өсөн дауҙарҙан йүнкенеме халҡым? Милли рухыбыҙ ҙа ҡаҡшай бара, наҙлы телебеҙҙең дә көмөш ысыҡ төшөр таңдарыбыҙҙы балҡытырҙай көс-ҡеүрәте кәмей бара түгелме? Шулай булмаһа, Тамара Ғәниева "Беҙҙең ғәмһеҙ аумаҡайлыҡ ҡонон күп замандар елкәһендә татыр" тип яҙмаҫ ине. Был шиғриәтте уҡыған һайын күҙҙәр асыла, хәтер, бигерәк тә ҡан хәтере терелә бара. Уның шиғриәтенең образдары, көмөш ысыҡ булып, күңелдәргә сафлыҡ өҫтәй, хәтерҙе күкрәүйәшнәүҙәре менән дауалай. Шиғриәт донъяһының тәғәйенләнеше лә ана шундалыр.

## Аҡыҡ көмбәҙҙәрҙән ауаз килә

*Унар ғына һумлыҡ, ай, ун аҡыҡ,*
*Һалдыр, егет, эйәр ҡашыңа...*
Халыҡ йырынан

Аҡыҡта тылсым көсө бар тип һанаған борон халыҡ. Яу сабар ирҙең эйәр ҡашындағы аҡыҡ уны бәлә-ҡазаларҙан һаҡларына ышанғандар. Этник мәҙәниәттең матур бер сағылышын Тамара Ғәниева ла беләлер, моғайын. Үҙенең бер китабын "Аҡыҡ көмбәҙҙәр" (2001) тип юҡҡа атамаған. Аҡыҡ көмбәҙ, тимәк, йорт-ил именлеген, мал-баш һаулығын һаҡлаусы мифологик сара.

Т.Ғәниева шиғриәте үҙе һәр кем өсөн аҡыҡ көмбәҙ була ала, минеңсә. Иң беренсе сиратта шуны ла өҫтәр инем: ҡаҡшаған милли рухты сәләмәтләндереүсе, сәмләндереүсе, үҫтереүсе шифалы ижад ул. Шифалы тигән һүҙҙе ҡайһы берәүҙәр оҡшатмаҫ. Шуға асыҡлыҡ индерәм: имселәргә ҡарата "тыны шифалы булды" тип әйтеү бар. Ә шиғриәт шағирәнең ҡайнар һулышы, тын алышы. Уның һулышы, тын алышы әҫәрҙәре аша уҡыусы күңеленә, хәтеренә күсә. Танһығыма күрә моңдо мин дә уның шиғриәтенән табам, зауҡыма күрә образлы һүҙҙе уның телмәр поэтикаһынан алам, рухым рәнйеүҙәренә дауаны ла Тамара Ғәниеваның ялҡынлы һәм уйсан поэзияһы бирә. Уның "Аҡыҡ көмбәҙҙәр"е — рух әлифбаһы.

Ерҙә, был донъяла йәшәү, тормош, ил бар икән, уның үҙенә күрә тәртип рәүештәре лә булырға тейеш. Уны ҡанун тип атап йөрөтәләр. Екән төбө ете айырым, тигәндәй, ул ҡанун да ете төргә, тора-бара етмеш ете тармаҡтарға айырылып китәлер, күрәһең. Әле лә көндән-көн ғәмәлгә яраҡлы-яраҡһыҙ ҡанундарҙың сығып тороуы ла ана шуға ишара. Тамара Ғәниеваның шиғриәтендә лә "Ҡанундар" поэмаһының күренекле урын биләүе ана шуға ҡеүәт. Тормош үҙгәргән һайын ҡанундары ла төрләнеп тора. Шағирә әйтмешләй, "заманалар алышына, әммә камиллыҡтар үтә ҡыялап". Ни өсөн ана шул камиллыҡтар тормошобоҙҙан ҡыялатып ҡына үтә бирә? Ҡанундар ябай халыҡ мәнфәғәтен яҡлауҙан алыҫ тора. Әҫәргә күҙ һалайыҡ:

Ике власть:
Золом һәм изгелек, —
Шағир менән дәүләт башлыҡтары.
Килешкеһеҙ ниңә ошо икәү,
Килешкеһеҙ ҡайғы-шатлыҡтары?
Шағиры юҡ икән —
Халыҡ та юҡ,
Һәр властың йәнә үҙ йырсыһы.
Һарайҙар һәм Үҙәк Комитеттар,
Халыҡ рухы тыуҙырғанын юйып,
Тәҡдим итә рәсми "Указ"лыһын.

Был юлдарҙа тәрән мәғәнә ята. Кешелек тормошо башланғандан бирле уның бер яҡ ҡотобонда изгелек, икенсеһендә золом торған. Шағир — халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы зат. Шул вазифаны башҡармай икән, ул зат инде шағирлыҡҡа дәғүә итә алмай. ”Шағиры юҡ икән — халыҡ та юҡ” тип юҡҡа әйтмәй шағирә. Шәхес, шағир халыҡтың араһында үҫә, һәм уны баһалау өсөн критерийҙар табыуы ҡыйын. Критерий һүҙе ”үлсәм” тигәнде аңлата. Үлсәм, баһа — шунан килә ”критика” һүҙе лә. Йәғни, әҙәби критика ла ниндәйҙер үлсәмгә тиңләү, ә тәнҡит йәки маҡтау түгел. Әммә милләттең күп замандар буйы һынап сарлаған зауҡына тап килмәгән әҫәрҙе ул ҡабул итмәй. Шәхес халыҡты күтәрә, тигән фекер бар. Шағир үҙ халҡын күтәрергә бурыслымы? Йәки, киреһенсә, халыҡ шағирҙың ниндәйен күтәрә, үҙенеке тип һанай?

Поэманың лирик геройы, хажға килгән мосолман кеүек, Палдискиҙағы Салауаттың һәйкәленә килә, рухы рәнйеməһен тип, хәйер бирә, диңгеҙ менән һөйләшә. Диңгеҙ ни ти һуң? Бына уның һүҙҙәре:

Анау яҡта ҡая күрәһеңме?
Шунда баҫып ҡай саҡ йырлар ине.
Һин күрһәткән һынға оҡшамаған.
Юғиһә беҙ уны таныр инек.
Һеҙ, кешеләр, хыялға бай йәндәр.
Үлгәндәргә табыныу — һеҙҙең ғәҙәт.
Юҡмы берәр тере батырығыҙ?
Уңайлы шул былай...
Әҙер терәк...

Салауаттың һынын диңгеҙ танымай. Әле булһа уның дөрөҫ һыны ижад ителмәгән, һәр скульптор уны үҙенсә әтмәләштерә, һәр сәйәсмән уның исемен үҙенсә ҡуллана.

Хоҡуҡтарыбыҙ ҙа, еребеҙ ҙә ҡанундар менән сикләнгән. Тамара Ғәниеваның ”Ҡанундар” поэмаһы — таланған ил зары. Салауаттың һөйәктәре бөгөн азатлыҡ яулаған халыҡтың ерендә ята. Салауаттың рухы бөгөнгө Башҡортостанды илһенерме?

Селтәремде элдем ситәндәргә,
Сит йәндәргә булһын иҫтәлек.
Рәхәт кенә йәшәгәндер, тиеп,
Иҫләмәгеҙ, мәгәр, баштар эйеп,
Был донъянан үтһәм үпкәһеҙ.
Өмөтләнәм.
Бер ҡайтырмын кеүек.
Ҡайталмаһам — тимәк, яҙмыштыр.
Уты ҡалыр, барыбер, сыра хәтле
Заманам тип көйгән һағыштың.

Лирик геройҙың ситәндәргә элгән селтәре сит йәндәр өсөн иҫтәлек булып ҡалыуы аянысlы. Селтәр тигән һүҙгә нимәләр йомолған һуң? Шуны тағатып ҡарайыҡ әле. Шағирә селтәрләп бәйләгән, биҙәкләгән селтәрҙә уның эше, шиғриәте төҫмөрләнә. Әммә кем генә уны күрә? Тел онотола, әҙип һүҙе китап булып халҡына барып етмәй. Инде нисә йыл эре поэма

күҙгә салынмай. Башҡорт милли мәҙәниәте фольклор кимәленә төшөп, шуның менән сикләнеп, тарихи иҫтәлек кенә булып ҡала бара түгелме? Бынылы ла замана ҡанундарымы? Башҡорт операһы, балеты, мәҫәлән, ярты быуат элек ижад ителгән әҫәрҙәр иҫәбенә генә йәшәй әлегә. Операла, балетта яңы башҡорт милли әҫәрҙәре хәҙер бөтөнләй күренмәй икән, был иң тәүҙә сәхнә кимәленә күтәрелерҙәй эре, эпик шиғри әҫәрҙәр ижад ителмәүе, ғөмүмән, бөгөнгө әҙәбиәттәге ауыр хәл менән бәйле түгелме? Сәхнәләрҙә сит мәҙәниәттең сейле-бешле тәржемәләре күрһәтелә. Йә булмаһа, үҙебеҙҙәге әрһеҙ, өлгөрөрәк ҡайһы берәүҙәрҙең баҫылмаған пьесалары ниндәйҙер сәйер юлдар менән репертуарға йыл һайын инеп тора, ә ул хәлгә ҡаршы торған режиссерҙар инде күптән сәхнәнән ситләштерелде. Талантлы әҫәрҙәр заман портфелдәрендә ете йоҙаҡ менән бикле хәлендә. Ете диңгеҙ аръяғынан, Америка тәңкәләрен түләп, сит мөхит режиссерҙарын, дирижерҙарын эшкә саҡыра театрҙар. Үҙебеҙҙең таланттар ситкә тибелә. Йыйын алып барыусыны ла Салауат Юлаев исемендәге премияға тәҡдим итә башланылар, ул премия ла хәҙер ”әҫәренә түгел, ә шәхесенә ҡарап” бирелә башланы. Шул бөйөк исемгә лайыҡ эштәр башҡарған шәхестәребеҙ башын баҫып эшләүен дауам итә, күтәрелә алмай. Ҡанундар түрә ярандары өсөн зиннәттер, ярлы-ялпы өсөн михнәттер. ”Ҡанундар” поэмаһы заман, ил, халыҡ яҙмышы тураһында шағирәнең ярһыу ораны булып яңғырай.

”Аҡыҡ көмбәҙҙәр”ҙән ауаз килә... Шул ауаздар рухыбыҙҙы үҫтерә, хәтерҙәрҙе яңырта, ярһыта, тормошҡа айыҡ аҡыл менән ҡарарға көс тә бирә, минеңсә.

## ”Йәшел тирәк”тең ҡырыҫ күләгәһе

”Йәшел тирәк” поэмаһы беҙҙең йәшәү рәүешебеҙгә арналған. Әҫәргә күҙ һалайыҡ:

Йәшәү тигән мәңге йәшел тирәк,
Олондарын сайҡай ваҡыт еле.
Һәр япрағы уның — тере хәтер.
Тере яҙмыш сере — һәр береһе.
Тере булһын тиһәң был мәңгелек,
Рухың менән һуғар тамырҙарын.
Изгелектәр ергә өҫтәп китһен
Бер күренеп кенә ҡалыуҙарың.

Йәшел тирәк — йәшәйешебеҙҙең мәңгелек сағылышы. Тирәк — ул йәшәү, тимәк, быуын шәжәрәһе. Быуын-быуын ғүмер теге донъя билдәһеҙлектәренә киткәс тә һәммәбеҙҙең шәжәрә тарихы, йәшәү хәлебеҙ ана шул тирәктә һаҡланып ҡалалыр. Изгелек һәм ғәйеп, намыҫ һәм бурыс — барыһы ла быуындар тирәгендә сағыла бара. Һин — был донъяның көлө түгел, сәскәләнер гөлө. Шул гөлдөң сәскә мәле тирәктең япрағына йоҡһон ине. Мәңгелекте тере иткең килһә, рухың менән, милли рухың менән һуғар тирәк тамырҙарын. Милли рух йәшәһә, шәжәрә тирәге лә йәшәр. Тәнең китһә лә, йәнең йәшәй икенсе үлсәмдәрҙә. Әгәр изгелектәр ҡылмаһаң был донъяға, һинән тороп ҡалған

йәнең һинең өсөн рәнйер. Бәҡыйлыҡҡа киткән һинең тән әруахыңдың тыныслығы фанилыҡта хәл ителә. Изге ғәмәл, изге мөнәсәбәт, изге яҙмыш, изге уй-хыял, изге ниәт — былар барыһы ла бәндәнең ергә өҫтәр бурыстары. Йәшел тирәк ботағында, япрағында, тамырында ҡалдымы икән һинән бер ҡот, ырыҫ, әллә ул еңел-елпе йәшәү мәлең бер туҙан ғына булып яғылып ҡалдымы?

Ғүмер елдәре ул саң-туҙанды ҡалған быуындарҙың хәтеренән йыуып төшөрһә, нимә ҡала һинән килер быуындарға? Поэмалағы лирик герой йәшәү серҙәренең айыштарын эҙләп уйлана. Яҙмышығыҙ ниндәй, ғүмерҙәштәр? Бына ошо һорау лирик геройҙы уйландыра. Һәм ғүмерҙәштәренең йәшәү моңо лирик герой хәтеренә һалына бара.

Нисә-нисәмә йылдарҙан һуң лирик герой тыуған төйәгенә, йәшел тирәгенә ҡайтып төшә. Был, әлбиттә, шиғриәттә лә, прозала ла, драмала ла тапалған алым. Ғүмерҙәш ауылдаштарының йәшәйешен асыҡ тасуирлау өсөн мотлаҡмы икән ул? Лирик геройҙың сабый сағындағы хәтирәләрен хәтерендә терелтер өсөн бындай алым кәрәктер. Ғүмер хаҡы менән һыналырҙай ир-егеттәр бармы икән хәҙер? Утлы яуҙан ҡайтҡан ҡаһарман да хәмер ҡолона әйләнгән. Быуын нығытып, яңы ир етеп, ҡалҡып килгән уландарға яу ҡаһармандары тейешле үрнәк-һабаҡ бирмәгән, шәжәрә тирәгенә өҫтәрҙәй сәм-ғәм бирмәгәндәр. Милли рухты дауам итерҙәй яңы быуындың шәжәрә тамырҙары ла сибек, шул уҡ ваҡытта, төрлө сүп-сар, сит тамырҙар менән буталып та бара түгелме? Аптырағандың көнөнән лирик герой ағайҙарына мөрәжәғәт итә:

Ауылымдың донъя тотҡалары —
Ағайҙарым!
Ҡайҙа намыҫығыҙ?
Кеселәргә аҡыл-һабаҡ биреп,
Хәҡиҡәттәр юлын табышығыҙ.

Әммә ғүмер ҡанундары аяуһыҙ. Донъя тотҡалары булған ағайҙар ҙа, тормош ауырлығын еңгәләр иңенә һалып, ер йөҙөнән ҡасып китеп барғандар. Был донъяға нисек килгәндәргә, ни рәүешле китеү-үтеүҙәргә — барыһына ла йәшел тирәк тере шаһиттыр.

Лирик герой бала саҡ хәтирәләренә бирелә. Аулаҡ өйҙәрҙең йәшерен серҙәре лә асыла. Яу ҡырынан ҡайтҡан Сәғит тә шул аулаҡта Зәйтүнә тигән ҡыҙҙың наҙҙарында ирей. Заманалар үтә. Зәйтүнәнең шул аулаҡтан алған емеше лә ир булып етә. Һәм бер заман ул ир йораты ла, Сәғит ғаиләһенән бер ҡыҙ алып ҡайтып, Зәйтүнә әсәһенә:

Әсәй, таңдан яусы ебәрәйек,
Түбән осҡа,
Сәғит ағайға...

— тип әйтә икән, кемдәр ғәйепле һуң бындай яҙмышта? Ата ҡыҙҙы, инә улды белмәҫ замандар ҙа килеп етте. Ҡәрҙәшлек мөнәсәбәте лә, рухи сәләмәтлек тә, ерҙә йәшәү мәғәнәһе лә ғүмер быуынынан тайпылған түгелме? Тайған быуындарҙы урынына кем ултыртыр икән? Бына ошо тыуған ауылының илауҙары, көлөүҙәре, әрнеүҙәре аша лирик геройҙың донъяға ҡарашын да күрәбеҙ, ерҙә йәшәүҙең әсе мәғәнәһен дә тойомлайбыҙ:

Ерҙә йәшәү — аҡыл-һабаҡ уҡыу,
Хәҡиҡәтте эҙләү, һаҡлау илде,
Изгелекле
Йә гонаһлы булыу —
Йәшәү юлы, йәшәү үҙе инде.

Күптәребеҙ хәмер юлында баштарын һала. Ундай хәл ҡабатланмаһын өсөн кешеләрҙә кешелекте уятырға, хәтерҙәрен тергеҙергә, йәне бешеләрҙең күңелдәрен йомшартырға саҡыра шағирә. Шәжәрә тирәгенең быуындары рәнйемәһен, рухи тамырҙары ҡоромаһын тигән хәүеф тә бар "Йәшел тирәк" поэмаһында. Нәҫел ағасына хыянат итмәү, ҡан таҙалығы, аҡыл айыҡлығы өсөн көрәш — һәр кемдең ерҙә йәшәү бурысы. Ул бурыс шәжәрәгә — йәшел тирәккә тап төшөрмәһен, тигән тәрән мәғәнә ята был поэмала.

## Мәғәнә поэтикаһы

Тамар Ғәниеваның ижадындағы тағы ла бер үҙенсәлекле йүнәлеште әйтеп китергә мөмкин. Ул да булһа — тарихи темаларға яҙылған поэмалары. Мәҫәлән, "Ҡыпсаҡтар", "Арҡайым" ана шундай тәрән мәғәнәле, башҡорт шиғриәтен үҫтереүсе әҫәрҙәр — заман эпостары. Мең йыллыҡтар төпкөлөндәге тарих саңын ҡағыу, тамам онотолоуға дусар булған хәл-ваҡиғаларҙы хәтер донъяһында тергеҙеү, тарихсы ғалимдар асырға баҙнат итмәгән боронғо аҡыл яҡтылыҡтарын айҡау — шағирә ижадының яңы биттәре. Сал тарихтағы быуындар яҙмышы — бөгөнгө быуын, заман өсөн рухи сығанаҡ. "Хәҙер миңә халҡым зары ла көс, о, Тамарис!", — тип ҡәләм оҫтаһы юҡҡа әйтмәй. Быуаттар төпкөлөнән килгән ауаз ҡандан килгән хәтерҙе уята, рухи көс бирә, йәшәү рәүешебеҙгә, маҡсатыбыҙға үҙ төҙәтмәләрен индерә. Йырҙа "үкенерлек түгел үткәндәр" тип йырланһа ла, был донъяға килеүебеҙ беҙҙән һуң тыуыр быуындарҙың йөҙөн ҡыҙартмаһа ине, тигән хәүеф тә бар шағирҙың ижадында.

Ҙур шағирәнең тағы ла бер үҙенсәлекле һыҙатын әйтеп үтмәһәм, уның ижадының стилистикаһы һәм поэтикаһы хаҡында яҙғандарым тулы булмаҫтыр. Уның шиғриәтендә тормош күтәргә ең һыҙғанған ҡатын-ҡыҙға хас ихласлыҡ та, аҫыл заттарға хас бер ҡатлылыҡ та, улар психологияһының иргә ярай белеү ихтыяры ла ярылып ятҡандай. Лирик геройҙың ундай һыҙаттары башҡа шағирәләрҙең әҫәрҙәрендә әлегә тиклем асыҡ сағылыш тапҡаны юҡ ине. Ҡатын-ҡыҙҙың күңел кисерештәрен, эске донъяһын, ирҙе ир итеп һанлау менән бәйле бер ҡатлы эскерһеҙ мөнәсәбәтен ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта күркәм дә булған телмәр поэтикаһы менән аса ла һала. Мәҫәлән:

Атыңды һин туғар.
Мунса яғам.
Һурпам бешкән.
Әҙер түшәгем.
Сәфәреңдең ғазаптарын онот,
Борсомаһын һис тә кисәгең.

Туратыңды, әйҙә, һуғарайыҡ,
Ҡыуалайыҡ шунан үҙәнгә.
Һин ҡайғырма:
Бер йыл тартай һимеҙ,
Икенсе йыл һимеҙ бүҙәнә.
Шөкөр, беҙҙең әле он етерлек.
Ҡышҡы һуғым да бар кәртәлә.
...Эй был ир-ат...
Тынғы тапмай йәнең
Ил хәстәрен һалмай елкәңә.

Тағы ла бер миҫал:

...Иҫкә төшә...
Матур көҙгө бер көн,
Мин ҡайнатам дамбаҡ самауыр.
Үләндәрҙән генә сәй бешерәм,
Йәндәреңде сәйем дауалар.
Шундай бейек, аяҙ һауалар...

* * *

Ҡаҙан аҫам икебеҙгә тиеп,
Балта ал да, йәнем, һин
Йорт бура.

Донъя көтөү ғаилә башлығы ирҙең ирлек бурысында ғына түгел, ҡатын вазифаһындағы заттың ҡатынлығынан да киләлер, минеңсә. Ир елкәһенә төшкән йөктө бергәләп күтәргәндә генә донъяң ҡотлолор, толҡалылыр. Ирҙе ир иткән дә ҡатын, хур иткән дә ҡатын, тигәнде һанламауҙан да хәҙерге ғаилә нигеҙе сатнай түгелме ни?

Тамара Ғәниева шиғриәтенең телмәр поэтикаһында психологик ҡанундар өҫтөнлөк итә. Шиғриәт — иң беренсе сиратта кеше рухиәтенә тәьҫир итеү сараһы. Донъя картинаһын танып белеүҙә лә аң менән аҡылдан тыш кешенең рухи булмышы, кимәле лә өҫтөнлөк итә икән, уның эстетик һәм этик ҡараштары ла әүҙемләшә бара. Шағирәнең поэтикаһы абстракциянан аныҡлыҡҡа, образлы мәғәнәгә ынтыла. Кеше күңеле һәм фекерләү даирәһен үҫтереүҙә был үтә лә мөһим...

Поэтика мәғәнәһеҙ яңғыраш була алмай. Поэтика — ул тәрән мәғәнә һәм күркәм моң. Бына ниндәй улар Тамара ханымда:

...Иламаным. Үрелеп һығып элдем
Һытылырға торған болотто...
...Тулап-тулап үрһәләнгән август
Сәс бөртөкләп илай урамда...
...Минһеҙ донъяң йөккә уҙалмаған
Түлһеҙ ҡатын ише һыҙлана...
...Теге көндө мин шиғырға һалдым,
Көйөн сығар, кәрәк һанаһаң...
Үҙем йырлар инем, көйһөҙ сағым,
Алданыуҙан алҡым ҡанаған.

...Имгәк туры тайға эйәрер тип,
Сыбырткылай ғына бер ғазап...
...Тынғыһыҙ был донъя сатнар кеүек
Һаҡһыҙ ғына керпек ҡағыуҙан...
...Ай-көҙгөгә ҡарап, йондоҙ-ҡыҙҙар
Ҡаш төҙәтә, буяй иренен...
...Киләһе көн ниндәй булыр,
Әле
Тарих булып ирей кисәге...
...Тау үренән һуҙыла ҡояш нуры...
Баҫҡыс итеп баҫам,
Тотоноп менәм,
Ҡояш нуры кеүек
Дуҫтар ҡулы...
...Көс еткәнсе түгел,
Намыҫынса
Йөк күтәрә кеше...
...Йүгәндәрен һалған устарыма
Мөхәббәт тә тигән ҡолонсаҡ...
...Ай нурҙары яуа.
Кемдәргәлер дауа,
Кемдәргәлер яза...
...Һарғая ла яҙҙы ағымдары
Ағиҙелдә йыуғас битемде...

Бындай тәрән мәғәнәле моң яңғырашын артабан да дауам итергә булыр ине. Әммә шағирәнең бөтә ижадын яңынан барлау, күсереп яҙыу кәрәкмәй. Уның һәр шиғыры ана шундай мәғәнәле моңдан туҡылған.

Һүҙемдең һуңында мин шағирәгә шундай теләктәремде лә еткермәксемен: "Асылмаҫтай ҡапҡа төптәрендә" тороп, "дыуамаллыҡ менән" сәбәләнмәйек: түрә-ғараның ҡапҡаһы хәҡиҡәтте күҙгә ҡарап әйтеүселәр өсөн бер ҡасан да асылмаясаҡ. Асылмаҫ ҡапҡа эстәрендә һинең шиғриәтеңдең мәғәнәһен, асылын аңлаусы зат-әһел юҡ. Һин — ысын халыҡ шағирәһе, имгәнгән өмөттәрен терелтеүсе, тайған рухын ултыртыусы. Һиндәге күркәм телмәр халҡың күңеленә көс-ғәйрәт бирә, уның әҙәбиәтен, мәҙәниәтен заман талаптары кимәленә күтәреп, тотоп тора.

Тамара Ғәниеваның шиғриәте ҡыҙыу янған усаҡты хәтерләтә. Шиғриәтебеҙҙә үтә ҡыҙыу, ярһыу усаҡтар күп булды, әммә тиҙ янып бөттө, халыҡҡа йылыһы ла, файҙаһы ла тейеп өлгөрмәне. Ә Тамара Ғәниева шиғриәтенең ҡыҙыу усағы йылдар үтеү менән һүрелмәй, көсәйә генә бара. Уның яҡтыһы күңелдәрҙә һүнеп барған хыялыбыҙға ҡанат ҡуя, хәтер төпкөлөндә рух шәмдәрен тоҡандыра, ерҙә мәғәнәле итеп йәшәү ышанысын да тыуҙыра.